# Йәш хәбәрсе

"Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,

Атам теле, әсәм теле – минең телем".

З.Биишева.



Сентябрь № 9, 2019 йыл

Талбазы ауылы Лицейы

муниципаль бюджет дөйөм белем

учреждениеһы

## Мәктәбемә

Эй, мәктәбем, ишектәрең асып,
Ҡосағыңа мине алаһың,
Белем осҡондарын күңелемә,
Дөрләп ялҡын итеп һалаһың.
Тоҡандырып кескәй йөрәктәрҙә
Тыуған илгә, ергә мөхәббәт,
Аңлатаһың беҙгә: “Тыуған халҡым
Ниндәй ғорур, ниндәй мөһабәт.
Эй, мәктәбем, белем усағындан
Сәсән йомғаҡтарын һүрәмен
Һинең ярҙамыңа киләсәктең
Алтын һуҡмаҡтарын үтәмен”.



## Беҙҙең класс

Мин Талбаҙы лицейының  5-се класында уҡыйым. Класыбыҙҙа 18 уҡыусы :7 ҡыҙ һәм 11 малай.Беҙҙең класта малайҙар көслө, ә ҡыҙҙар аҡыллы. Малайҙар  шуҡ, шаярырға ярата.Беҙ төрлө ауылдарҙан йыйылғанбыҙ: Ҡарамалы, Ғүмәр, Талбаҙы.Шуға ҡарамаҫтан  беҙҙең класс бик дуҫ, татыу.Бер-беребеҙгә һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙабыҙ, кәңәштәр бирәбеҙ.

Беҙ төрлө ярыштарҙа ҡатнашабыҙ, экскурсияларға сығабыҙ. Барыбыҙ ҙа  түңәрәктәргә йөрөйбөҙ. Малайҙар футбол түңәрәген үҙ итә.Ҡайһы  бер уҡыусылар музыка мәктәбенә йөрөйҙәр.

Лицейҙа беҙҙе аҡыллы, үҙ эшен яратҡан уҡытыусылар уҡыта.Улар беҙгә ҡыҙыҡ итеп дәрестәр аңлата, күп нәмәгә өйрәтә. Беҙ уларҙы яратабыҙ , ихтирам итәбеҙ.
Бына ниндәй беҙҙең класс!

Фәйзуллина Ралина

Һағынып көттөк.
Йәнле, йәмле йәйҙәр үтте,
Алтын көҙ килеп етте.
Мәктәпкә барыр көндәрҙе
Һәр кем һағынып көттө.

Дәүләтова Арина, 4-се класс уҡыусыһы

## “Ҡара көндәр”

**Йыл һайын Төнъяҡ Осетияның Беслан ҡалаһында теракт ҡорбандарын  иҫкә алыу көндәре үткәрелә. Сара өс көн  дауам итә. Иҫкә алырға килеүселәр, стеналарға элеп ҡуйылған фотоһүрәттәр алдына сәскәләр, йомшаҡ уйынсыҡтар һалалар,һыу менән тултырылған һауыттар тора.(Бандиттар ҡулында ҡалған балалар бер йотом һыуһыҙ интегә) Мәктәптә матәм йыры яңғырай, ҡатын-ҡыҙҙар түгелеп илай...**

15 йыл элек, 2004 йылдың 1 сентябрендә, тантаналы линейка ваҡытында Бесландың 1-се һанлы мәктәбе ҡоралды террорсылар  тарафынан баҫып алына. Ут өйөрмәһе яуҙырып, бандиттар барыһын да мәктәп бинаһына ҡыҫырыҡлап керетәләр. Олораҡтар ҡасып өлгөрә. Бәләкәй класс уҡыусылары, ата - әсәләр, уҡытыусылар  - барыһы бер мең ике йөҙҙән ашыу кеше , террорсылар ҡулында ҡала.Террорсылар  үҙҙәрен йыртҡыстарса тота. Өс көн дауамында балаларҙы ашатмай-эсермәй, шартлатҡыс тултырылған спортзалда ҡурҡытып

тоталар.Террор һөҙөмтәһендә **334** кеше үлә (шуларҙың **180**-дән күберәге балалар),783 кеше яралана. Был террорҙы ойоштороусылар – Шамил Басаев, Магамет Хашиев була.

Беслан фажиғәһе – Бөтә Рәсәй фажиғәһе ул. Был “ҡара көндәрҙе”, Беслан ҡорбандарын, Беслан кешеләрен ҡотҡарыусы геройҙарыбыҙҙы оноторлоҡ түгел. Улар балаларға үҙҙәренең ғүмерҙәрен бүләк иттеләр.

Тыныс булһын илебеҙ.Һәр килгән көнгә шатланып йәшәйек,тырышып белем алайыҡ.

## Беҙ терроризмға ҡаршы

Йыл һайын “Беҙ терроризмға ҡаршы” лозунгыһы аҫтында лицейҙа митинг үткәрелә. Был Беслан ваҡиғаһы менән бәйле. Уҡыусылыр Беслан ҡалаһындағы иҫкә төшөрҙөләр. Һуңынан “Һәр ваҡ булһын ҡояш!” йырын йырланылар.

.



**Уҡыусылар ижады**

## Сулпан ауылы

Борон-борон заманда йәшәгән ти Сулпан исемле егет. Ул ҡалҡыулыҡта өй һалған. Һунарға йөрөп үҙенә аҙыҡ тапҡан. Сулпан тәбиғәтте лә, йәнлектәрҙе лә бик яратҡан. Ул көн дә бер ағас ултыртҡан. Тиҙҙән был ағастар үҫеп ҙур, матур урман хасил булған. Унда бик күп йәнлектәр үрсегән, ҡоштар һайраған.

Шулай бик бәхетле көн итеп ятҡанда, көтмәгәндә Сулпан сирләп киткән. Тамам түшәккә ятҡан. Хәлһеҙләнгән, күҙҙәрендә йәшәү нуры һүнә башлаған. Ике ай интегеп ғүмеренең ахырына еткән. Шулай итеп ул донья менән хушлашкан.

Күп тә үтмәй был йәмле урынға кешеләр килеп урынлашҡан. Ҡалкыулыҡта ауыл барлыҡҡа килгән. Был ауылға Сулпан тип исем ҡушҡандар.

Зиргизова Алия

## Тыуған ерем

Башҡортостан элек-электән үк матур ер булған. Ул һайрар ҡошло туғайлы, тәмле-тәмле еләк-емешкә, төрлө-төрлө бай урманы, һыуы еренә һыймаған йылғаһы, балығы тулы күле, күккә олғашып, күҙ яуын алып торған тауы – барыһы ла булған ил. Борондан уҡ беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ошо гүзәл ерҙә өйөр-өйөр мал көтөп, һунар итеп, балыҡ тотоп йәшәгән.

Яхина Азалия



**Уҡыусылар ижады**

## Көҙ етте

Тәбиғәт үҙгәреп, ағастар ҡыҙыл, һары күлдәктәрен кейә. Баҫыуҙарҙа ҡыр эштәре тамамлана. Ҡоштар бер-бер артлы йылы яҡтарға оса, ә беҙҙә ҡалғандары ауылға яҡыныраҡ килә. Йәнлектәр ҙә ояларын йылыта, аҙыҡ йыя. Айыу, терпеләр ҡышҡы йоҡоға йыйына, ҡуянҡай һоро тунын аҡҡа алыштыра.

Ноғоманов Ильяс, 4 класс уҡыусыһы

## Ысын дуҫтар



Сентябрь айында Самат Солтанов көтмәгәндә бәләгә осрағайны. Мәктәптән ҡайтып барғанда, аяғы тайып китеп йығылып, ҡулын һындырҙы.

Бына инде ике ай дауамында ул өйҙә ултырырға мәжбүр. Уҡытыусылар янына барып уҡыталар ҙа ул, тик Саматҡа синыфташтарының тауышы, улар менән бергә парта артында ултырыу, төрлө сараларҙа ҡатнашыу етмәй. Әммә беҙ уға күңелһеҙләнергә, һағынырға, юҡһынырға юл ҡуймайбыҙ. Синыфым менән һәр ваҡыт хәлен белергә барып йөрөйбөҙ. Ауырыу балаға ошонан да ҙур шатлыҡ бармы икән? Әлбиттә, юҡ.

Ә уҡыусымдың өйөнә килер алдынан Рәсәй халыҡтарының рухи-әхлаҡи мәҙәниәт нигеҙҙәре дәресендә үткән хәл белеү этикетын да хәтергә төшөрәбеҙ. Сөнки уның буйынса беҙ телефондан ата-әсәһенән ризалыҡ һорарға, янында күпме ваҡыт булыуыбыҙҙы иҫәпкә алырға, һөйләшеү барышында ягымлы, тотанаҡлы булырға, иҫәнләшеп инергә, һаубуллашып сығырға, ҡайтыр алдынан изге теләктәр теләргә тейешбеҙ. Уҡыусыларым хәлен белергә барғанда тәмле күстәнәстәр ҙә алырға онотмай. Барыбыҙ ҙа Саматтың тиҙерәк һауығып сығыуын көтәбеҙ.

Рәйсә Усмановна, 5 “Б”класының класс етәксеһе

Мөхәрририәт: башҡорт теле уҡытыусыһы Булатова Г.М., 11 класс уҡыусылары